III Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайын ҡаршылап

# Илде тотҡан телем, һүҙем бар

## (Педагогик эссе)

Ә.Р. КӘРИМОВА,
Өфө ҡалаһының "Берҙәмлек" лицейы уҡытыусыһы,
Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусыһы

*Башҡорт балаһы мин,*
*Ер хәтерендә*
*Мең йыл уйылып барған эҙем бар.*
*Быуындарға ялғап быуындарҙы*
*Илде тотҡан телем, һүҙем бар!*

Үҙен башҡорт тип исәпләгән һәр милләттәшем халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың был шиғыр юлдарын ғорурлыҡ менән ҡабатлайҙыр. Ғорурланмаҫлыҡ түгел, сөнки йәшәйешебеҙҙе, булмышыбыҙҙы ерҙә раҫлап килгән меңәр йыллыҡ тарихыбыҙ бар. Башҡортомдо донъя кимәленә күтәргән Салауат, Мостай, Вәлиди, Мортазабыҙ – милләтебеҙҙе кешелеккә билдәле итеүсе шәхестәребеҙ, дүрт быуат аша килгән "Урал батыр" теле бар.

Бала килеш кенә күнелемдә: "Уҡытыусы буләм!" тигән уй яралғанда, талпыныу менән был хыялыма ашҡынғанда, уҡытыусы һөнәренең ҙур яуаплылыҡ һәм оло сабырлыҡ талап иткәнен аңлап та етмәй инем. Күҙ алдымда бары һәр көн ашҡынып мәктәпкә барыуым, унда киләсәккә өмөт менән бағыусы бала күҙҙәре ҡаршылауы ине.

Хыялым тормошҡа ашты: мин – уҡытыусы. Парта артында миңә һынап та, яратып та, ҡыҙыҡһынып та төбәлгән балалар – беҙҙең киләсәк. Ниндәй булыр ул? Ошо сабыйҙар ниндәй шәхес булып үҫер? Уҡытыусы һөнәре индәремә яҭҡас ҡына, минең яҙмышым – илем, телем, халҡым яҙмышы менән бер тамырға барып тоташҡанын аңланым. Үҙ көнөм өсөн генә түгел, халҡым киләсәгенә лә яуаплы икәнмен.

Ни тиклем етди һәм яуаплы һөнәр һайлағанымды йылдан-йыл нығыраҡ тоям. Үҙемдә остаздарымдың, уҡытыусыларымдың күркәм сифаттарын шәйләп ғорурланам.

Бөгөн уҡытыусы һөнәренә ҡараш төрлөсә. Минеңсә, әгәр һин был һөнәрҙе һайлағанһың икән, уға аҙаҡҡаса тоғро ҡалырға тейешһең.

Төрлө милләт вәкилдәре булған уҡыусыларым рус, инглиз, немец һәм башҡа телдәрҙә иркен аралаша, ә минең бурысым – ошо ерҙә тыуған, ошо төбәктә көн иткән балаларҙы башҡорт теленә өйрәтеү, уның матурлығын тойоп ҡәҙерләгән шәхес тәрбиәләү. Һәр бала, тәү сиратта, шәхес. Шуға ла һәр уҡыусыма айырым яҡын килеп, уға шәхес итеп ҡарайым. Тел белеү – оло байлыҡ, хазина. Шул байлыҡтан килер быуын мәхрүм ҡалмаһын.

"Үҙ теленә вайымһыҙ кеше – ул ҡырағай кеше. Бындай кеше асылы менән зарарлы, сөнки әсә теленә ҡарата уның ғәмһеҙлеге үҙ халҡының үткәненә, хәҙерге хәленә һәм киләсәгенә ғәмһеҙ ҡараүҙан килә", – тигән рус яҙыусыһы Константин Паустовский.

Ҡалала үҫкән башҡортом балаһының аңы уянып етә алмай әле. Сөнки был йәш быуын вәкилдәренең атаәсәләре үҙҙәре туған телһеҙ, моңһоҙ тәрбиәләнгән! Шуға ла, уҡыусыларым менән бер рәттән, уларҙың ата-әсәһендә ойоп ҡалған, йоҡлаған тойғоларҙы уятып ебәреү, милләтем рухын тергеҙеү – минең бурысым. Халҡым рухына, теленә йәшәү кәрәк. Үҫеп килгән быуын башҡортлоғон ғорур рәүештә танығын, милли рух, үҙаң төҫһөҙләнмәһен өсөн мин уҡытыусы ла, сәйәсмән дә, сәсән дә, тарихсы ла булыу яҙмышын һайлағанмын. Сабый күңеле, ижади ҡомары, аҡылы, хәтере – һутлы тупраҡ. Шуға ул тәрән тойғо, көслө аҡыл, ярһыу хис менән һуғарылырға тейеш. Бөгөнгөнә, киләсәк-

те тарихи тамырҙарға бәйләргә, менәр йылдар буйы халыҡ күңелендә хазиналар булып йыйылған, алтынға бәрәбәр рухи ҡомартҡыларҙы бала зиһененә еткереү мотлаҡ. Халҡы мираҫын белеп үҫкән бала ғына киләсәгенә битараф булмай. Илаһи ярһыу менән дәрестәрем тыуһын, яҡты ут булып уҡыусыларым зиһенен балҡытһын, уйландырһын, күңелдәренә йәм генә түгел, ғәм-хәстәр һалһын! Халҡымдың яҡты киләсәгенә өмөтөм, ышанысым бар! Салауаттар, Аҡмуллалар беҙҙең менән быуындан-быуынға етәкләшеп барһын, бөгөнгө уҡыусыларым киләсәктә "Уралым!", "башҡортом!" тип янһын өсөн иртә таңдан мәктәбемә ашығам.

**Тормош һабаҡтары**

# Көслөләр сафта ҡала

**С.С. ӘМИНЕВА,**
Ейәнсура районының Яңы Себенле мәктәбе уҡытыусыһы,
Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғыһы

**Маҡсат.** Көслө ихтыярлы кешеләр менән таныштырып, улар өлгөһөндә уҡыусыларҙы ҙур тормошҡа әҙерләү, үҙендә ихтыяр көсө, рух ныҡлығы тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу.** Яҙыусы-шағирҙар Ибраһим Ғиззәтуллин, Кәүсәриә Шафиҡова, Фәнис Яруллин, Рәфис Мөхәмәтдинов, Зәһит Иҫәкәев портреттары, "Башҡортостан" гәзите, "Аманат" журналы, әҙәби китаптар.

**Уҡытыусы.** Уҡыусылар, тормошта һәр ваҡыт алдығыҙға маҡсаттар ҡуйып, яҡты хыялдар менән йәшәгеҙ, тик бер ҡасан да хыял менән генә сикләнмәгеҙ, һәр эшкә ҡыйыу тотоноғоҙ, үҙегеҙҙе эшкә өйрәтегеҙ. "Маҡсат юғары булған һайын йәшәү ҡәҙерлерәк, ҡыҙығыраҡ, ҡиммәтлерәк, гүзәлерәк," – ти яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева. Үҙегеҙҙә бәләкәйҙән ихтыяр көсө тәрбиәләгеҙ. Уның өсөн иң элек алдыңа алған эште, һәр йомошто еренә еткереп үтәргә кәрәк. Ихтыяр көсө булған кеше бөгөн эшләнә торған эште иртәгәгә ҡалдырмай. Ошо ҡағиҙәне үҙләштереп, үҙенде эшкә ҡуша белһән, ихтыяр көсө тәрбиәләнер. Ихтыяр көсө тәрбиәләгәндә ике төрлө төшөнсәне бутарға ярамай. Беренсеһе – ялҡаулыҡтан йәки ихтыяр көсө булмағанлыҡтан эштә ялҡаулаңыу. Икенсеһе – хәлһеҙлектән, сәләмәтлек самалы булыуҙан көсөңдән килмәгән эшкә тотоноп, үҙ-үҙенде ихтыярһыҙлау. Ә хәҙер тормош юлында осраған бөтә ауырлыҡтарҙы еңеп, үҙендә йәшәүгә дәрт, ижадҡа илһам тапҡан көслө ихтыярлы кешеләр менән танышайыҡ.

**1-се уҡыусы.** Бөгөн һүҙ Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һәм унан I группа инвалиды булып ҡайтҡан яҙыусы Ибраһим Ғиззәтуллин тураһында барасаҡ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул бөгөн беҙҙең арала юҡ. Ләкин унын һуғышта һәм тыныс тормошта күрһәткән батырлыҡтары йәш быуынға киләсәктә лә өлгө булып торасаҡ. Ә йәшәү ул – көрәш.

Ибраһим Ғиззәтуллин 1918 йылдың 15 сентябрендә Ишембай районының Түбәнге Әрмет ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуа. Йәнырыҫ мәктәбендә белем ала. Стәрлетамаҡ ҡалаһында педагогия училищеһын тамамлағас, үҙе уҡыған Йәнырыҫ мәктәбенә тарих, туған тел уҡытыусыһы булып эшкә ҡайта. Тиҙҙән уны армия сафына алалар һәм Алыҫ Көнсығышҡа ебәрәләр. Армия хеҙмәтен тултырып ҡайтып, Ҡазан университетына уҡырға инергә дәртләнеп йөрөгәндә генә һуғыш башлана. Ибраһим Ғиззәтуллиндың барлыҡ пландары емерелә. Һуғыштын тәүге көндәренән үк Төньяҡ-Көнсығыш фронтына эләгә.

**2-се уҡыусы.** 1941 йыл, 23 октябрь... Ул ҡаты яралана.